7 май 2015 йыл

# ЙӘЙҒОР

Ҡасим Дәүләткилдеев исемендәге республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты гәзите



# С Днём Победы!!!



9 мая 2015 г. наша страна отмечает 70-летие Победы в Великой Отечественной войне. Каждый гражданин нашей Родины, от мала до велика, хочет почтить память погибших в годы Великой Отечественной войны.

Дорогие Ветераны! Поздравляем Вас с 70-летием Великой Победы!

Этот праздник вошел в наши сердца, как символ героизма, символ достоинства России, символ мужества народа, отстоявшего мир на земле. Мы свято чтим память наших земляков, не вернувшихся с полей сражений. Мы помним подвиг великих тружеников, ковавших Победу в тылу. Мы благодарны защитникам всех поколений, посвятившим себя служению Отечеству.

С уважением к Вам, директор РХГИ
Садыкова Гулемеш Хайрулловна

---

## Минең өләсәйем-тыл ветераны

Минең өләсәйем 1925 йылда тыуған.Унының исеме Шәүғәнә булған.Бала сағы өләсәйемдең аслыҡ-юҡлыҡ ваҡытта уҙған.Тәүҙә,ете йәшкә тиклем,улар һәйбәт йәшәгәндәр.Өләсәйемдең атаһын «Середмяк» тип йөрөткәндәр.Уларҙың үҙ ере, ике аты, һыйырҙары һәм һарыҡтары булған.Атаһы ул ваҡытта колхозға инмәй ҡарышҡан.1932 йылдың яҙында уларҙың ғаиләһен «раскулачивать» иткәндәр һәм атаһын ҡулға алғандар.Һуңынан уларҙың ғаиләһе дүрт бала менән Арғаяш район үҙәгенә алып барыла һәм вагонға тейәп уларҙы Себер яҡтаына алып китәләр.Киров өлкәһенең Амутин районына алып баралар.Унда уларҙы бер баракка урынлаштырылар.Баракта өс хужа йәшәйҙәр.Тайгала улар бик интегеп ас йәшәйҙәр.Ике йыл үткәс,1934 йылда өләсәйемдең атаһы һәм Нәкиә исемле апаһы астан үлгәс,өләсәйемдең әсәһе,Шәүғәнә өләсәйемде һәм Мотоғолла исемле малайын алып йәйәү тимер юлына төшөп ҡасҡандар.Улар менән Өфө ҡалаһынан һәм Златоустан ике ҡатын малайҙары менән юлға сыҡҡандар.Юлда интегеп асҡа,һоранып ашап килгәндәр.Уларҙың кейергә әйберҙәре лә иҫке булып,аяҡ кейемдәре лә булмағас аяҡтары киҫелеп, ташҡа йыртылып интеккәндәр.Ул ваҡытта өләсәйемдең әсәһе аяҡтарына әрекмән япраҡтары урап атлатҡан.Бүреләрҙән ҡурҡырға тура килгән. Килә-килә торғас,ас интеккән әсәйҙәр малайҙарҙы бер ауылға һоранырға ебәрәләр.Шул ваҡытта Златоуст малайы юғала.Уны оҙаҡ көтмәй,эҙләмәй улар юлға сыға.Сөнки ҡулдарында бер документ та юҡ,милицияға мөрәжәғәт итһәләр һорашасаҡтар,һиҙеп ҡалһалар,бөттө баш... Килә-килә торғас Өфөлә ҡатын ҡала,һуңында Златоуста ла бер ҡатын тороп ҡала.

Өләсәйем әсәһе һәм апаһы менән өсәүләп «утыҙ көн» тигәндә Кыштым ҡалаһына килеп етәләр. Унда әсәһе атаһының таныштарын таба.Таныштары Вәсләй(Василий) бабай аяҡтарына ботинкалар тегеп,мунса индереп уларҙы бағып ала.Унда һәйбәт ашанып,таҙарып аяҡҡа баҫҡас ҡайтыр юлға сығалар тыуған ауыл яҡтарына.Тыуған ауылға килеп еткәс тә уларҙы бигерәк ҡаҡҡандар. Шулай ҙа бирешмәй йәшәп киткәндәр.Өләсәйемә ун алты йәш тулғанда 1941 йылда һуғыш башлана.Улар колхозда тыл ҡатнашыусыһы булып эшләгәндәр,иген сәсеп ,көлтә яһап һуғышҡа ярҙам иткәндәр...

Карина Байгазина, 8Б класы уҡыусыһы

# Военное детство моей бабушки

«Когда началась Великая Отечественная война, мне было 8 лет. Наша семья жила в селе Нижние Киги. С первых же дней войны мой отец ушел на фронт. Очень трудное испытание выпало на нашу долю. Испытание на стойкость и верность. Тогда началось голодное время. Часто в доме не было ни кусочка, чтобы накормить меня и моих двух братьев подростков. Скрепя сердцем, со слезами, маме пришлось на некоторое время отдать меня в детский дом. А я и представить не могла, что такое жить без родителей. Когда я оказалась в детском доме, меня трясло от одной мысли, что никогда не увижу своего родного дома.

В детском доме мне выдали холщовое платье коричневатого цвета. Позже, мне показали комнату, где я буду спать. Она была очень холодной и неуютной.  Нас в этой комнате было 7 человек. Иногда мне было страшно тут находиться и видеть, как мои ровесники -сироты, спорили и дрались между собой. Но закрывая глаза, я вспоминала мамин хлеб с хрустящей корочкой, папины сильные руки и братьев, которые не уступали в работе отцу.

Мне очень не хватало семейного тепла. Поэтому в один из серых, унылых дней  я отпросилась у воспитателя на улицу, а сама сломя голову , в одних лишь носках, побежала домой. Вот, оно, мое родное гнездо! Тепло  дома было непередаваемо. Я  умоляла маму о  разрешении остаться с ней. Но мама, опустила  глаза и обняла меня. Уже на следующее утро мама отвела меня в детский дом обратно. Здесь я прожила целый год.

Отец вернулся с войны в 1945 году. На станцию Сулея прибыл военный эшелон. Отца встретили наши соседи и повезли домой на лошади. Возвращаясь, они заехали в детский дом и забрали меня. Увидев отца, я обняла его и заплакала от безумной радости. Папа тоже не смог сдержать своих слез. Мы говорили не умолкая. За весь год я не проговорила столько, сколько говорила всю дорогу.

Вот и наш дом. Во дворе пусто. Маме пришлось много чего продать, чтобы прокормить братьев. Уже на следующий день, папа начал возрождать наш двор: строить сарай, приводить в порядок сад, чтобы в нем расцвели, как прежде,  большие красные розы.

Незаметно прошла весна, наступило жаркое лето. В лесу уже стали поспевать ягоды. Недолго думая, я пошла в лес одна. В лесу было тихо и свежо. Только птицы напевали, что-то очень мелодичное. Вдруг, я услышала чьи-то голоса. Оказалось, что здесь были девочки из детского дома. Окружив меня, они со злостью  начали требовать, чтобы я сняла платье, выданное мне в детском доме. Я ужасно испугалась и умоляла не отнимать его у меня. Мне пришлось пообещать им, что завтра платье будет в детском доме. В слезах я прибежала домой. И начала рассказывать все маме, а папа в это время доставал с рюкзака ярко-желтый ситцевый материал. Папа пообещал, что к следующему утру, мама сошьет мне новое платье. После всего случившегося, я долго боялась выходить на улицу одна».

Эту историю мне рассказала моя любимая бабушка. Работая не покладая рук., родители бабушки, подняли ее и всех их детей на ноги. Мои прабабушка и прадедушка никогда не считали себя героями, не  рассказывали о тяжелых годах войны. Но даже эти скупые воспоминания говорят об их величии. Мой прадедушка  Минниахмат , долгих четыре года шел к победе, о его подвигах писали в газете «Красная звезда». Прабабушка Гайнур, пока он воевал вела хозяйство, подняла детей и ждала треугольные конвертики с войны.

Сейчас,  у моей бабушки на стенах висят, в потемневших рамочках, фронтовые фотографии, похвальные грамоты прадедушки, за его труд. Я горжусь тем, что мои прабабушка и прадедушка, достойно внесли клад в победу. Прабабушка в годы войны выполняла мужскую работу. Она так же имеет много трудовых наград. Ведь не зря говорят, что «медаль за бой, медаль за труд, из одного металла льют».Достойная жизнь моих прабабушек и прадедушек , является для меня примером. Мы все в семье чтим память о них, никогда их не забываем и стремимся быть достойными их.

Хакимьянова Диана, ученица 10А класса

1941 йыл. “Фронтҡа!” Был хәбәр илебеҙҙең һәр бер йортона бәлә, ҡайғы, үлем килтерә!

Башҡортостандың Мәсетле районында йәшәгән Бахтеев Минлеғәле Бәхтей улының ғаиләһенә лә был хәбәр 1941 йылдың йәйендә килеп етә. 27 йәшлек Минлеғәле ҡатыны, балалары менән хушлашып, фронтҡа китә. Башта Мәсетлелә военком була, аҙаҡтан Курск ҡалаһына ебәрелә. Ошолай башлана йәш егеттең һуғыш йылдары. Бөйөк Ватан һуғышы...

Алыш. Оборона. Немец танктары килә лә килә. Беҙҙекеләр бирешмәй. Полк командиры Минлеғәлене саҡырып:

- 4-5 һалдатты алып ошо өйҙәр артынан һул яҡ оборонаға сығығыҙ! Ә, тағы ла, ипләберәк. Кешеләр әҙ. Һаҡ булығыҙ.

- Есть ,товарищ командир!

Минлеғәле һалдаттарҙы алып юлға сыға. Улар араһында иң олоһо Минскиҙан Ирхан исемле 38 йәшлек егет ине. Уның бәләкәй сағынан уҡ йырсы, артист булғыһы килә ине. Башҡортса ла белә. Әле генә концерттар ҡуйып эшен башлағайны ла бит, һуғыш ғүмерен бөтөнләй икенсе яҡҡа борҙо.

- Юлсур, ҡара әле шул немецҡа! Ҡая бир автоматты. Хәҙер мин уны...

- Йә инде, шашма. Шым булырға кәрәк. Күрһәләр бөттө баш!

Әйтеп киткәндә, Юлсур ул Шишмә егете. Әсәһе, апаһы бар. Шаян егет ул. Сөм ҡара күҙле, ҡара сәсле. “Деньги есть Уфа гуляем, денег нет Чишмы сидим”, – тип ҡыҙыҡ ҡына итеп иҫкә ала ул тыуған яҡтарын.

Улар араһында тағы ла Өфө һәм Силәбенән Әхмәтйән менән Сәбирйән дә була.

- Товарищ Минлеғәле! Ишетәһегеҙме? Балалар... – тип шым ғына тынып ҡалды Сәбирйән.

- Киттек, ул тегендә. Һигеҙенсе штаб артындағы подвалда.

Быны ишеткән Юлсур шаҡ ҡатып ҡалды.

- Нисек киттек? Ҡайҙа? Беҙҙең приказ бар! Нимә менән ярҙам итәбеҙ беҙ уларға? Һыу юҡ, аҙыҡты инде үҙебеҙҙә аҙна күрмәнек тиһәң дә була... Бында немецтар, бында һуғыш...

- Ниндәй приказ? Приказ, имеш. Унда балалар, аңлайһыңмы һин шуны?! Улар унда бомбежканан һуң ҡалған, моғайын, сыға алмайҙарҙыр! Беҙҙең бер мәсьәлә - ҡотҡарыу. Үҙенде уйлайһың һин. Ашамаған, имеш.

- Әхмәтйән, бар санчасҡа хәбәр ит. Штаб артындағы подвалда ҡалған балаларға ярҙам итегеҙ. Ә беҙ алға!

Минлеғәле Бахтеевич үҙ эшен яҡшы белә ине, тик үҙ балаларын иҫкә төшөрөп был етемдәрҙе былай ҡалдырып китә алмай ине. Шуға ла ул Әхмәтйәнде кире ебәрҙе.

Оборона оҙаҡ булды. Күп һалдаттар ятып ҡалды был алышта. Күбеһе яраланды. Ә был дүрт ҡыйыу егеттәргә йәшәү бәхете насип булды. Шулай айҙан ашыу алыш, һуғыш...

Бер заман немец танктары Курск ҡалаһының сигенә барып етер алдынан ҡаты бәрелеш булды. Капитан яраланды. Егеттәргә нисек булһа ла был алышты еңергә кәрәк ине.

Пулялар әҙәйгәндән-әҙәйә бара, аҙыҡ-түлек тураһында әйтеп тораһы ла юҡ . Тағы ла өс танк ҡына ҡалды тигәндә, автоматтың пулялары бөттө. Ирхан яҡындағы складҡа әкрен генә сығып бомба менән бер нисә пулемет килтермәксе ине. Китте. Арттан немецтар ата. Шатланып, барып еттем тигәндә генә ҡайҙандыр дошман килеп сығып егеттең йөрәгенә ата.. 38 йәшлек Ирхан йырсының ҡыҫҡа ғына ғүмере ошолай өҙөлә...

Быны күргән күрше отрядтың старшинаһы ярҙам кәрәк икәнен һиҙеп Минлеғәлеләргә кешеләр ебәрә. Ә улар килгәнсе егеттәрҙең хәле бик ауыр була.

Һуңғы граната. Минлеғәле танкыға яҡыныраҡ килеп гранатаны ырғытырға була һәм шул ваҡытта уның ҡулына, аҙаҡтан аяғына аталар. Ул йығыла, тик танкты шартлатып өлгөрә һәм ошонда инде күрше полк килеп ярҙам итә.

Минлеғәлене ҡаты яраланғандан һуң, уны Ульяновск ҡалаһына госпиталгә алып китәләр. Госпиталдә ул хәл йыя, туғандарына хат яҙа. Тик ҡаты яраланған аяғы менән ҡулын ғына табиптар дауалай алмағандар. Шуға күрә уны тыуған районына оҙаталар,ҡайтыу менән ир-егеттә көсө етмәгән колхозға председатель итеп тәғәйенләйҙәр...

Ауыр юлдарҙы үтеп, ҡайғы, бәлә кисереп яҡындары янына ҡайта Бахтеев Минлеғәле Бәхмей улы – минең олатайым, Еңеү көнөн яҡынайтҡан батырым!

Алһыу Абсаликова, 8Б класы уҡыусыһы

# Бөйөк Еңеүгә - 70 йыл

## Һеҙҙең ҡандарығыҙ менән түләнгән...

Һуғыштың шанлы көндәре,бәхеткә ҡаршы,әллә ҡасан үткән.Беҙҙең көндәрҙә лә 1941-1945 йылдарҙа булған донъялағы иң ҡанлы Бөйөк Ватан һуғышын иҫләү,хөрмәтләү мотлаҡ.

Йылдан йыл һалдаттар ,һуғышта ҡатнашыусылар һәм башҡа шаһиттар әҙйеп бара.Нисек кенә булмаһын,яңы тыуған быуын кемдәр беҙҙе фашистик Германиянан ҡотҡарғаны һәм ул ҡотҡарыу ниндәй көс менән килтерелгәнен аңлап етмәй.Бик күп беҙҙең өләсәйҙәребеҙ,картатайҙарыбыҙ кешелеклеһеҙ,вайымһыҙ үлтерелгән,йәберләнгән.Ысынлап та,вафат булған ҡатын-ҡыҙҙарҙың ,ир-егеттәрҙең һаны һаман да беҙҙе аптырата.Уларҙың һаны меңәрләп түгел,миллионлап йыйылған.

Беренсе йыл бик ауыр булған,әммә ләкин,беҙҙең ғәскәрҙәр берҙәмләшеп,көслөләнеп аяҡтарында нык торҙолар һәм яуап ҡайтарҙыҡ.Әлбиттә,берәү ҙә ситтә ҡалмаған,бәғзеләр заводтарҙа эшләһә,икенселәре тылда алһыҙ-ялһыҙ көс түккән,башҡалар еңеүҡотон күтәреп.һалдаттарға концер-спектаклдәр менән йөрөгән,уларҙың күңелдәрен дәртләндереү маҡсатында үҙ эшенең һөнәрмәне булып ҡалған, ҡай берәүҙәр төн йоҡоларын йоҡламай янсыҡтар,бейәләй-ойоҡтар бәйләгән.

Һуғыш бик күп күҙ йәштәре килтергән.шулай ҙа һуғыш кешеләрҙе айрмаған,киреһенсә,балал арҙы һәм өлкәндәрҙе берләштергән.Һуғыш йылдарында үҫкән балалар кесе йәштән ҡыйулыҡҡа, саялыҡҡа,теүәкәллеккә өйрәткән.Кешеләр хәсрәт ваҡытында үҙе тураһында ғына уйламай,унда изгелек,кеселек хистәре уяна.Дуҫлыҡ,берҙәмлек,ҡыйыулыҡ,бар мәшәкәттәрҙе йырып сығырға ярҙам иткән.

Һәр бер кешенең йөрәген ялмап алған патриотик хистәр кешеләр менән булышлыҡ иткән.

2015 йыл бөтәбеҙ өсөн дә илебеҙ тарихында ҙур даталарға билдәле .Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығын билдәләйбеҙ!Минең өсөн иң мөһиме-ул беҙҙең өсөн ғүмерҙәрен биргән кешеләр тураһында яҡты хәтерҙә булыу.Ерҙә инде һуғышты үҙ күҙҙәре менән күргән,үҙ йөрәгенән үткәргән кешеләветерандарыбыҙ һаны йылдан-йыл аҙая.Әйткәндәй, бар ғаләм уларға үҙҙәренең ғүмерҙәре менән бурыслы.Хөкүмәт уларҙы иң оло исемдә менән һәм бүләктәр менән бүләкләне,уларға арнап китаптар яҙалар,кинофильмдар төшөрәләр,һәкәлдәр күтәрәләр,халыҡ-ара саралар үткәреләбылар барыһы өсөн дә рәхмәтебеҙҙе күрһәтер өсөн.Әлбиттә,улар өсөн был ҡиммәтле,шанлы,күркәм саралар кәрәкмәй.Улар өсөн беҙҙең хәтеребеҙҙә улар эшләгән бөйөк батырлыҡтарыбыҙ булһа-шул етә һәм әлбиттә,баш өҫтөбөҙҙә зәңгәр күк булһа,урамда атыу тауыштары ишетелмәһә,балалар аслыҡтан интекмәһә-шул бәхет.

Беҙҙең һәр саҡ хәтеребеҙҙә,без беләбеҙ:”Беҙҙең яҡты көнөбөҙ,һеҙҙең ҡандрығыҙ менән түләнгән”...

Ынйыгөл Ишбулатова, 9В класы уҡыусыһы

### Әсә

Әсә тора ҡәбер эргәһендә,
Һығылып илап тора.
«Нимә булды икән уға?»
Кешеләр ҡарап тора.
Килеп эргәһенә баҫһам,
Йәштәр төштө куҙемдән,
Оло таштa фото тора
Ә фотоһында балаһы.
«Кәҙерле әсә илама,
Ул бит һине яратҡан,
Һинең өсөн шунда барып,
Яралы ятып ҡалған».
Минең һүҙҙәремде аңлап,
Туҡтатты ул илауын.
Рәхмәттәрен миңә уҡып,
Йылмайып тороп ҡалды.

Карина Кужеәхмәтова, 8А класы уҡыусыһы

Гәзит 2000 йылдан башлап нәшер ителә
Тиражы: 25 экз.

Мөхәрриәт:
Ишбулатова Ы., ГаяноваА., Баширова Э.
Баш мөхәррир урынбаҫары:
Сәлихова Гүзәл Әхәт ҡыҙы

Баш мөхәррир:
Хакимйәнова Венера Салауат ҡыҙы
Верстка, дизайн:
Радионов Артур Иванович